*Әнисә ТАҺИРОВА*

# «ораньмминЙондо-фрешгнн...»

## *Бөйөк Рәсәй — Тәңре биләмәһе...*

Бөйөк Рәсәй — Тәңре биләмәһе,
Һаҡлай беҙҙе көслө фәрештәләр.
Ҡем был ергә нәфсе менән баҫа,
Ҡөтә уны ҡаты яза, ҡәһәр!

Яуызлыҡты һис кисермәй Тәңре,
Ситме, үҙме — ул язаға дусар.
Рәсәй-илгә ҡара ауын ҡорған
Үҙенә тик ҡара яҙмыш юллар.

Үрт һалғандар — йортһоҙ, ерһеҙ ҡалыр,
Ғүмер өҙгән — яман үлем табыр.
Йәш түктереп, байлыҡ туплағандар,
Мәле еткәс, упҡындарға ауыр.

Бөйөк Рәсәй — Тәңре биләмәһе,
Һаҡлай уны көслө фәрештәләр.
Атла намыҫлы, аҡ юлдан
Рәсәйгә төҫ булам, тиһәң әгәр.

## *Шиғриәткә*

Һин тип, күпме урау юлдар үттем,
Ярҙым бурандарҙың әсеһен.
Һине көтөп,
Һәр көн йорт-еремде
Һары һағыштарҙан әрсенем.

Йәшел генә ебәк үлән тиеп,
Булды һаҙлыҡтарға батҡаным.
Һырттарына күпме ҡамсы төштө
Мин атланған саптар аттарҙың!

Һин булғанға,
Күңел тартҡандарҙан,
Яҡындарҙан ҡай саҡ ваз кистем.
Тын һуҡмаҡта,
Аулаҡ мөйөштәрҙә
Бары һинең менән күрештем.

Мин ут хисле һөйәркәң дә булдым,
Беләә уны тымыҡ төн генә.
Миндә күпме иркә наҙ барлығын
Беләһең — һин.
Бары һин генә!

Сыҙам, тоғро ҡатының да булдым,
Икәү бергә керҙек ялҡынға.
Ауҙым тигәс,
Ҡабат күтәрелдем
Һинең өсөн,
Һинең хаҡына!

Иркә, ғәмһеҙ балаң да мин булдым,
Һиндә күрҙем йәмен донъяның.
Һөйҙөм, көйҙөм,
Булды хаталарым,
Тик юлымдан йырһыҙ уҙманым.

Һин үҙең дә тоғро булдың миңә,
Ҡәмегәндә күңел сәмдәрем.
Һағыш һары шәмен ҡабыҙғанда,
Ҡабыҙҙың һин илһам шәмдәлен...

Һыҙылып төшкән таң яҡтыһы булып,
Күңелемә һәр саҡ моң ҡайтһын.
Шиғриәтем,
Һәр саҡ һуҡмағымда
Һинең тоғролоғоң оҙатһын!

## *Теләк*

Еремдә яҙ, күгем аяҙ,
Сәңгелдәктә бала илай.
Пар ҡанатлы фәрештәләр
Уны яҡты нурға урай.

Фәрештәләр, шул кескәйҙең
Һеҙҙән тора бар даланы.
Ғүмер буйы пар мөхәббәт
Йылытһынсы шул баланы.

Өләсәй, ул һәм ейәнсәр
Бергә килә, сумып хискә.
Йәнәш кенә осоп бара
Өс ҡанатлы бер фәрештә.

Эй, фәрештәм, изгелекте
Ҡурсалаһын яҡты һының.
Аҡ донъяла шул өс таған
Имен булһын, имен булһын!

Дүрт ҡанатлы аҡ фәрештә
Балҡыта был ерем таңын.
Эй, бөйөк көс,
Һаҡлаһаңсы
Дүрт тарафын бар донъяның!

2002

## *Аҡ боландар булһын юлдашың!*

*Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы*
*Ноғман ағай Мусинға*

Мусин Ноғман,
Бар яҙмышы — урман!
Урман өсөн көрәш, артылыш!
Сағраларҙы ярып үткәс кенә,
Сағыл баштарына еткәс кенә,
Офоҡтарын аса нур-балҡыш.

Мусин Ноғман,
Мөхәббәте — урман!
Унда зәңгәр тауҙа — аҡ болан.
Һикәлтәле юлдар үтеп, әҙип
Аҡ боланлы тауға артылған.

Мусин Ноғман,
Йәнәшәлә урман
Йөҙәр саҡрым булып һуҙылған.
Шул саҡрымдар уның күңеленә
Һағышлы моң булып уйылған.

Һағышлы ла булмаҫ ине ул моң,
Талана шул ерем урманы.
Шуғалыр ҙа ярһып туҙыналыр
Уралымдың ҡырыҫ бураны.

Мусин Ноғман,
Ҡәләм уға — ҡалҡан!
Әйтерһең, ул әкиәт батыры!
Әҫәрҙәрен уҡып, кешеләрҙең
Күңелдәре үҫте, яҡтырҙы.

Әле әҙип,
Сағраларҙы ярып,
Тауҙар түбәһенә артылған.
Был бит беҙҙең Мусин Ноғман тиеп,
Текләп ҡарап тора аҡ болан.



## *Усаҡ яға әсә...*

Усаҡ яға әсә.
Бар уйҙары
Изгелектә.
Аштар бешерә.
Минут һайын
Мыш-мыш йоҡлап ятҡан
Балаларын иҫкә төшөрә.

Был донъяла
Тик изгелек өсөн
Дөрләһендәр ине усаҡтар.

Ут янында
Уҫал уйҙар менән
Ҡайралмаһын ине бысаҡтар.
Ҡерҙәр йыуа әсә.
Йыуған керҙән
Өйҙә паклыҡ, сафлыҡ тарала.
Һәр бер йөҙҙә шатлыҡ нуры балҡый,
Урын ҡалмай бында ҡараға.

Мөмкин булһа,
Ул таҙартыр ине
Дүрт тарафын барлыҡ донъяның,
Ҡер-туҙандан арындырыр өсөн
Ҡарайып та бөткән Ер шарын.

2010

## *Һораным мин Йондоҙ-фәрештәнән...*

Һораным мин Йондоҙ-фәрештәнән:
“Ниңә ергә зилзиләләр ҡайта?”
Әйтте йондоҙ йәнле Нур-фәрештә:
“Сөнки ерҙә золом-йәбер арта”.

Һораным мин Йондоҙ-фәрештәнән:
“Ниңә ерҙә бик йыш туфан ҡалҡа?”
Әйтте миңә нурлы, йондоҙло йән:
“Сөнки ерҙә етем йәндәр арта.

Етем балаларҙың күҙ йәштәре
Ерҙә шулай даръя булып ҡалҡа.
Әҙәм ҡылған барлыҡ ҡара эштәр
Барығыҙҙың иңдәренә ята.

Ҙур гонаһтар афәттәрҙе тарта,
Һанға һуҡмай әҙәм Хоҙай нурын.
Әйләнде ер мәхшәр усағына,
Ундайҙарға тик тамуҡта урын.

Тәңре биргән көндө төн иттегеҙ.
Тәңре биргән нурҙы юҡ иттегеҙ,
Ҡарайттығыҙ Тәңре биргән аҡты,
Бысраттығыҙ Тәңре биргән пакты.

Әгәр кеше аҡылына килһә,
Бер-береһенә терәк, туған булыр.
Иблис һуҡмағынан тайпылмаһа,
Юҡҡа сығыр әҙәм, туҙан булыр”...
Һораным мин Йондоҙ-фәрештәнән...



## *Боҙ каласыҡ*

Яңы йылдың шаулы бер кисендә
Мин боҙ ҡаласыҡҡа юлыҡтым.
Юлыҡтым да, күңел юшҡындарын,
Барлыҡ һағыштарҙы оноттом.

Ҡеше хыялының матурлығын
Биләгән был әкиәт-ҡалаға
Мин һоҡланып баҡтым:
Был кистәрҙә
Шатлыҡ бит ул күпме балаға!

Юлымдан мин хатта туҡтап ҡалдым,
Әсир итте матур тамаша.
Дан шыршының яҡты балҡышынан
Күңел үҫә, күҙҙәр ҡамаша.

...Бөгөн мине шыршы урынында
Ҡаршылаһы ҡара ер генә.
Боҙ ҡаласыҡ ирер.
Күңелдәрҙә
Ҡалыр бары хыял-сер генә.

Ни өсөндөр шул саҡ хәтерләнем
Һинең әсирләүсе һүҙҙәрҙе.
Аһ, мөхәббәт!
Боҙ ҡаласыҡ һымаҡ,
Ҡамаштыра ине күҙҙәрҙе!

Әрнеү һала, яра һалып китә
Һаташтырған алдаҡ мөхәббәт.
Һинән бары аҡ хәтирә ҡалыр,
Боҙ ҡаласыҡ,
Шуға мең рәхмәт!

* * *

Елбәҙәкләп йондоҙ-ҡарҙар яуа,
Барлыҡ донъя аҡҡа төрөнгән.
Әйтерһең дә, ап-аҡ ҡарҙар булып
Бәхет, ырыҫ яуа күгемдән.

Бәхет, ырыҫ яуа күктәремдән,
Ерем яралары уңалыр.
Емелдәшеп яуған ҡар-йондоҙҙан
Күңелдәрҙә яҡты моң ҡалыр.

Яҙын ерем балҡып күҙен асыр,
Эсеп аҡ ҡарҙарҙың аҡ һыуын.
Төркөм-төркөм күсәр ҡоштар ҡайтыр
Тойоп еребеҙҙең балҡыуын.

Хуш еҫ бөркөп муйыл сәскә атыр,
Яңы көйҙәр көйләр йылғалар.
Һандуғастар шаңҡығансы һайрап,
Күңелдәргә кереп оялар.

Әллә ниндәй сихри хыялдарға
Сорнай аҡ йондоҙҙар сәсмәһе.
Әйтерһең дә, һырый тәҙрәләргә
Ҡышҡы таңда муйыл сәскәһе.

Ғинуар, 2013

